# Эй, башҡортом, иман килтер.

Эй, башҡортом, иман килтер,
Доға ҡылып бары Ғайсаға.
Милләтеңде шул саҡ һаҡлар Хоҙай,
Ҡыҙыҡмаһаң бүтән аллаға.

Эй, башҡортом, доға ҡыл һин,
Ҡалдыр мәжүсиҙәр йолаһын
Йөрәгеңдә иман артһын өсөн,
Раббым Үҙе, Изге һүҙен юраһын.

Эй, башҡортом, уҡы Изге Яҙма,
Ярҙамынан һине Хоҙай айырмаҫ.
Йәнеңә Һинең бирер Ул шифа,
Исемлектән төшөрөп ҡалдырмаҫ.

Эй, башҡортом, Алланы данла,
Насип ҡыл йәннәткә ирешергә.
Раббым ҡалдырмаҫ һине фатиханан,
Керер өсөн изгеләр рәтенә.

Эй, башҡортом, Хоҙай артынан атла,
Барлыҡ гонаһтарыңды ҡалдырып.
Тәүбә итеп, Ғайсаны һин һайла
Ғүмереӊ бөткәс, тормаҫ өсөн -ҡайғырып!